*Аҫылғужа БАҺУМАНОВ*



# КҮПЕРЛЕ

Башҡортостанда егермеләп шарлауыҡ иҫәпләнә. Баймаҡ районындағы Ғәҙелша (Ибраһим), Белореттағы Атыш, Ишембайҙағы Ҡуҡрауыҡ — киң билдәлеләрҙән. Шарлауыҡтар беҙҙә ғәмәлдә баҫҡыслылар, йәғни һыу төрлө бейеклектәге текә үрҙәрҙән һикәлтәләрҙән-һикәлтәләргә «колай». Шаулап-шаулап торған тауыштар сығарғанға шулай атағандар. «Шарлама» тип тә йөрөтәләр. Ғәҙелша шарлауығы, мәҫәлән, Ирәндек тауҙарында дөйөм бейеклеге 15,2 метр тәшкил иткән өс һикәлтә үтә түбәнгә табан. Атыштың исеме есеменә тап килә: йылға тау ҡыуышынан атылып килеп сыға ла шундуҡ өс метрға аҫҡа һикерә һәм, 200 метр тирәһе ағып барғас, Ләмәҙгә ҡоя. Ҡуҡрауыҡ иһә яҙғыһын йәки көслө яуындарҙа ғына шарлап-ярһып ала, ә ҡорораҡ йылдарҙа йәйгеһен бөтөнләй юғала тиерлек.

Мәләүез районындағы Күперле шарлауығы ла бәләкәй генә, бейек тә түгел...

Ошо юлдарҙы яҙғанда кино һәм телевизор экрандарында ғына күргән атаҡлы Ниагара шарлауығы хәтергә төштө. Уның бейеклеге 52 метр, һыуы иһә хәтәр күп, шарлауы әллә нисәмә саҡырымға ишетелә икән. Шулай ҙа Ниагаранан да ҙурыраҡ, еллерәк, ғәйрәтлерәк бер әү бар. Көньяҡ Америкала, Аргентина менән Бразилия сиктәрендә Игуасу тигән бик ҡеүәтле йылға ҡапыл дүрт саҡырымдай киңлеккә йәйелеп китә лә Парана яҫы таулығындағы тарлауыҡҡа «колай» — 82 метрлыҡ тәрәнлеккә! Шарлауы ҡоттарҙы осормалы, ти. Бихисап һикәлтәләргә берәлә-бәрелә төшкән миллиондарса кубометр һыу сәсрәүҙән шарлауыҡтың өҫтөндә лә 30 метр бейеклектә «болот» хасил була. Тәбиғәттең ғәйәт мөһабәт күренешенә хайран ҡалып, Элеонора Рузвельт (АҠШ-тың элекке Президенты Франклин Делано Рузвельттың ҡатыны) былай тигән, имеш: «Игуасу шарлауығы янында беҙҙең Ниагара кухня краны һемәгенән аҡҡан һыу һымаҡ ҡына икән дәһә!»

Беҙҙең шарлауыҡтарға килһәк, бынан миллиондарса йылдар әүәле Ниагара һәм Игуасу кеүектәре лә булғандыр, әле иһә шул уҡ Күперлене «кухня краны һемәгенә» сағыштырһаҡ, ул шприцтан һығып сығарылған нәҙек һыу ағымы хәтле генәлер. Иллә мәгәр шуны онотмайыҡ: мөғжизә барыбер ҙә мөғжизә булып ҡала, ул бәләкәй-ҙурға бүленмәй. Кемдәр Күперлене күрмәгән, уның һүрәтенә йәки «Башҡортостан энциклопедияһы» китабының 208-се битенә урынлаштырылған фоторәсемгә күҙ һалығыҙ — мөғжизәгә ышанырһығыҙ шулай ҙа. Яҙғыһын, тәбиғәт уянғанда, Нөгөш һыуһаҡлағысы тарафтарына юллана алаһығыҙ, йылға үренә уң ярлап китһәгеҙ, мотлаҡ тап итерһегеҙ шарлауыҡты. Бында йәнә бер мөғжизәгә хайран ҡалырһығыҙ — таш күпер ул. Йылғаның атамаһы ла шунан.

Был тәбиғи күпер ерҙәге карст процестары һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Ошондай «күперҙәрҙе» Башҡортостандың таулы төбәктәрендә лә, тигеҙлектәрендә лә осратырға мөмкин, сөнки беҙҙең ил карст

күренештәренең классик өлгөһө булған республика иҫәпләнә. Салауат районының Лаҡлы ауылынан ике саҡырымдарҙа Әй буйындағы «Таш ҡапҡа» ла карст «тоҡомло». Күп кенә мәмерйәләр ҙә беҙҙә шулай.

Ғалим Р. Фәтҡуллин үҙенең «Башҡортостандың ҡыҙыҡлы тәбиғәт күренештәре» тигән китабында (Башҡорт дәүләт педагогия институтының ротапринт баҫмаһы, 1993) былай ниҙәр яҙа:

«Тәбиғи күперҙәр ер аҫты йылғаларының түбәләре ашалыуының ҡалдыҡтары булып тора... Иң мөһабәт һәм матур карст күперҙәренең береһе — Нөгөштөң уң ҡушылдығы Күперле йылғаһында, әүәлге Сәүкә утарынан дүрт саҡырымда. Күпер тар һәм тәрән генә үҙән аша ятҡан... Күперле йылғаһы, Сәүкә утарынан 3-4 саҡырымда ер аҫтына инеп аға башлаған һәм канал түбәһен йыуған, барлыҡҡа килгән мәмерйәнең өҫкө өлөшө үҙ ауырлығынан һәм ел ашауҙан емерелә башлаған. Хәҙерге күпер — мөһабәт экзотик күренеш — борон замандарҙа Күперле йылғаһы барлыҡҡа килтергән мәмерйәнең ҡалдығы ғына ул».

Күперле күперенең оҙонлоғо 35, киңлеге 4, аҫылмалы өлөшөнөң оҙонлоғо 10 метр тәшкил итә. Йылғанан 16 метр бейеклектә. Әйткәндәй, бүтән илдәрҙә-ерҙәрҙә лә Күперленең «иптәштәре» байтаҡ. Шул уҡ АҠШ-та Юта штатында, Сан-Хуан йылғаһы Колорадоға ҡойған урында, Пауэлл һыуһаҡлағысынан алыҫ түгел «Йәйғор күпер» бар. Киңлеге 85 метрға еткән каньонярҙарын тоташтыра ул, ысынлап та йәйғор йәки көйәнтәне хәтерләтә. Алһыу төҫтәге ҡомташ арканың киңлеге 10 метр. Әлбиттә, Күперленекенән бейек — 88 метр.

Юта штатында ошондай ҡомташ күперҙәр бихисап икән. Бигерәк тә Пейзаж арка тип аталғаны кешеләрҙе хайран ҡалдыра, уның аҫылма өлөшөнөң оҙонлоғо 89 метр тәшкил итә, донъяла ошо күрһәткесе буйынса беренсе урында тора... «Йәйғор күпер»ҙе американдар 1910 йылда уҡ милли байлыҡ тип иғлан ҡылған, бында хатта аркаларҙың милли паркы ла булдырылған. Ҡыҫҡаһы, тәбиғәт мөғжизәләрен һаҡлау буйынса уңғанлыҡ күрһәтәләр, беҙ иһә гел һуңлайбыҙ, үҙ байлыҡтарыбыҙға үҙебеҙ битарафбыҙ. Күперленең күпере тәбиғәт ҡомартҡылары исемлегенә беҙҙең республикала фәҡәт 1965 йылдың 17 авгусында индерелгән, ә шарлауыҡтың үҙен иҫкә лә алмағандар. 1986 йылда «Башҡортостан» милли паркы ойошторолоп, уға Бөрйән, Күгәрсен һәм Мәләүез райондарына ҡараған 79,8 мең гектар ер беркетелгәйне. Ошо парк үҙ эсенә Нөгөш һыуһаҡлағысын да, Ҡотоҡ-Сумған мәмерйәләрен дә, әлеге күперҙе лә ала.

Тимәк, парк булғас, ундағы үләндәр ҙә, хайуандар ҙа, бүтәне лә һаҡланырға тейеш. «Ҡырағай» туристар, был яҡтарҙа йомошйол менән йөрөүселәр ошоно онотмаһын, үҙ ейән-ейәнсәрҙәрен, бүлә-бүләсәрҙәрен, тыуа-тыуасарҙарын тәбиғәт гүзәллектәренән мәхрүм итмәһен.

Башҡортостанда 1995 йылда айырыуса һаҡланырға тейешле территориялар тураһында закон ҡабул ителгәйне. Уның нигеҙендә айырым идаралыҡ та ойошторолдо. Идаралыҡтың эшен күргән, законды белгән ҡайҙа...

Әгәр тауҙарыбыҙ беҙгә, кешеләргә, һынаулы ҡарап өнһөҙ ултырһа, йылғаларыбыҙ бик тауышланмай ғына, ҡайғырышып аҡһа, шишмә-инештәребеҙ хәлһеҙ генә сөркөлдәшһә, шарлауыҡтар иһә бар хәлдәренсә һөрән һалырға тырыша: тәбиғәттең дә йәне бар — йәндең ҡәҙере булырға тейеш! Ишет ошоно, Кеше! Йәнең-күңелең менән ишет!

